# Беҙҙең студент йылдары

№2 10 декабрь, шишәмбе 2008 йыл

Туймазы педагогия колледжының Туған телдәр бүлеге гәзите

## Беренсе аҙымдар

Педагогия колледжында уҡыған студенттар өсөн иң ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс саҡ - практика ваҡыты. Студент теория менән практика араһында ҙур айырма бар икәнен нәҡ ошо ваҡытта ғына һиҙә. Ә ҡайһылары, бәлки, үҙҙәренең дөрөҫ һөнәр һайламағандарын аңлайҙарҙыр. Айырыуса тәүге дәрес биргәндә ҡаушата. Сөнки бөтәһе лә һиңә ысын уҡытыусыға кеүек ҡарайҙар бит.



Практикант алдында ҙур талаптар тора. Ул балаларға дөрөҫ итеп теманы аңлатырға ғына түгел, ә бының менән бергә балаларға тәрбиә бирергә, ниндәй ҙә булһа өлкәлә белемен үҫтерергә тейеш. Был бик ауыр мәсьәлә, айырыуса студенттар өсөн. Балалар ҙа төрлө була. Уларҙың бөтәһе менән уртаҡ тел табыуы йәш уҡытыусы өсөн ҡыйын. Был осраҡта дәрескә бик яҡшы әҙер булырға, теманы ғына белергә түгел, ә уҡытыу методикаһы менән таныш булырға кәрәк. Әлбиттә, дәрес биргәндә, хаталар ҙа була. Үҙенең хаталарынды күреп таныу, уларҙы төҙәтеү ҙә мөһим роль уйнай. Шуға күрә анализдар яһала. Был йәш уҡытыусыға яңылышыуҙарын төҙәтергә ярҙам итә.



Беҙҙең төркөм студенттары практиканы Туймазы ҡалаһының һигеҙенсе һанлы мәктәбендә үтә. Уҡытыу, дөйөм алғанда ,яҡшы бара. Әлбиттә, ваҡ-төйәк хаталар булып алғылай. Беҙгә балалар менән эшләү бик оҡшай. Студенттар уҡыусылар менән уртаҡ тел тиҙ таптылар. Һәр практиканттың дәресте ойоштороу алымдары бар.

Беҙҙең төркөм ҡыҙҙары – Динара, Ләйсән, Диниә, Илнара, Зөлфиә, миненсә, балаларға сифатлы белем бирә һәм киләсәктә уҡытыусылыҡ эше менән шөғөлләнергә көслө әҙерләнә.

Был практика беҙҙең киләсәк уҡытыусы эше өсөн яҡшы мәктәп булып тора.

*Әхмәҙиева З. (42-се төркөм)*

42-се төркөм студенттары ярты йыл практика үттеләр. Улар тәжрибә уртаҡлаша:

1. *Иң беренсе үҙеңде ышанысЛы тоторға кәрәк.*
2. *Балаларҙан ҡурҡырға ярамай.*
3. *Һәр дәрескә бөтә күңелде һалып әҙерләнергә кәрәк.*
4. *Практика барышында практиканттар үҙ-ара аралашырға, бер-береһенә ярҙамлашырға тейеш.*
5. *Күргәҙмәлеккә иғтибарлы булырға.*
6. *Методистар әйткән иҫкәртеүҙәргә үпкәләмәҫкә, хаталарҙы ҡабатламаҫҡа тырышырға.*
7. *Практикант бәхтә, ыҫпай кейенһен!*

# Октябрь, ноябрь айҙары нисек үтте?

## Иң оло байрам үтеп китте

Теп-теүәл *15 йыл элек, 1990 йылдың 11 октябрендә,* Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверинитеты тураһында декларация ҡабул ителде. Башҡортостан тарихында был бик мөһим һәм оло ваҡиғаларҙың береһе. Шуның айҡанлы, был күркәм байрамды беҙҙең Туймазы педагогия колледжы студенттары ла бик матур концерт менән билдәләп үттеләр.

Байрам концертын ҡурай моңо асып ебәрҙе. Гөл-сәскәләр, шарҙар менән биҙәлгән матур сәхнәнең иң түрен бөйөк шағирыбыҙ Р.Ниғмәтиҙең һүҙҙәре биләп тора ине. Залға килеп инеү менән, күңел күтәрелеп китә, байрамса кәйеф өҫтәлә. Ҡурай моңона эйәреп, 32-се төркөм талибәһе Атанғолова Гөлназ «Урал батыр» эпосынан өҙөк башҡарҙы. Концертты 23-сө төркөм талибы Аяз менән 52-се төркөм талибәһе Нәфисә алып барҙы.



Номерҙар төрлө булды. Әбсәләмов Р. етәкселегендәге «Хазина» ҡурай ансамбле башҡарған көйҙәр күңелдәрҙе күтәреп, дәртләндереп, тыуған яҡтар тураһында йылы хистәр уятты. Миңлегалина Алһыу, Миңлегалина Рәмзиә, Андриянова Катя менән Фәйзуллина Эльвира, Азаматова Фәйрүзә, Абдуллина Динара ҡәҙерле атай-әсәйҙәргә, туғандарға, һөйгәндәргә бағышланған йырҙары менән беҙҙе йырлап ҡыуандырҙылар. Артабан аҡҡош һынлы, һығылма бил ҡыҙҙарыбыҙҙан торған «Аҡҡоштар» бейеү ансамбле дәртле башҡорт бейеүен һәм 12-се төркөм талибәһе Ғәбсәләмова Әлиә татар шаян бейеүен бүләк иттеләр. Концерт барышында I-IV курстар араһында Р. Ниғмәтиҙең тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы үткәрелгән викторинала еңеүсе 12-се төркөм талибәһе Мырҙағолова Таңһылыуҙы ҡотланылар.

Шулай итеп, көтөп алған байрамыбыҙ аҙағына ла яҡынлашты. Сығыштар аҙағында колледжыбыҙҙың уҡыу һәм тәрбиә эштәре урынбаҫары Рәйхана Әмир ҡыҙына һүҙ бирелде. Ул сығыш яһаған студенттарға, алып барыусыларға һәм концертты ойоштороусы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙына ҙур рәхмәттәр әйтте һәм бөтәһен дә байрам менән ҡотлап, изге теләктәр әйтте.

## Төркөмөбөҙҙә – асыҡ дәрес

Асыҡ дәрес – яуаплы, мөһим һәм ауыр Сара. Быны беҙ, студенттар, яҡшы аңлайбыҙ.



Бына әле яңыраҡ, 10 октябрҙә, беҙҙең төркөмдә башҡорт әҙәбиәте буйынса асыҡ дәрес үтте. Дәрескә абруйлы ҡунаҡтар килде. Улар - Әйүпова Э.Ш., Фатихова Ш.Х., Латыпова И.Ә. һәм Өфөнән килгән ҡунаҡ Дәүләтбаева Р.Ғ. Дәрестә Н. Асанбаевтың «Рәйсә», «Фәйзи» драмалары хаҡында теоретик мәғлүмәт менән таныштыҡ. Шунан әҫәрҙең проблемаһы хаҡында фекер алыштыҡ. Фәйзи, Рәйсә, Фирҙәүес, Зөһрә кеүек геройҙар яҙмышы беҙҙе битараф ҡалдырманы. Драманың өҙөктәрен роллэп уҡығанда, үҙебеҙ ҙә ошо осор ваҡиғалары эсенә инеп, ҡайнағандай итеп хис иттек. Үҙебеҙ йәш быуын вәкилдәре булғанғамы, был драма беҙгә бигерәк тә яҡын тойолдо. Геройҙарҙың хис-тойғоларын, шатлыҡ-ҡыуаныстарын үҙебеҙҙең йөрәк аша үткәрҙек.

Драмала ғаиләләге традициялар,ғаилә ағзалары араһындағы ҡатмарлы мөнәсәбәттәр тураһында һүҙ бара. Быйыл,Ғаилә йылында, был тема бик актуаль.

Садрисламова А. *(52-се төркөм)*

## Үҙидара көнөндә

Уҡытыусы... Ниндәй матур, һәм яғымлы һүҙ. Ошо һөнәргә эйә булырға тип беҙ төрлө районларҙан йыйылдыҡ. Уҡып бөтөргә 5 йыл ҡалды. Шулай ҙа үҙебеҙҙе һынап ҡарарға мөмкинлектәр бар. Бына, мәҫәлән, беҙ, йәғни V курс студенттары, ошо көндә бөтә уҡытыусылар башҡарған вазифаларҙы үҙ иңебеҙгә алдыҡ. Яңы директор, директор урынбаҫарҙары, предмет уҡытыусылары – бөтәһе лә тулҡынланып көттө байрам көнөн. Һәм бераү ҙә һынатманы. Һәр «уҡытыусы – студент» үҙенең ниндәй «емеш» икәнлеген күрһәтә алды. Беҙҙең төркөм башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса дәрестәр бирҙе. Яҡшы әҙерлек булғас. дәрестәр ҙә күңелле үтте. Ҡыҙҙар ҡәнәғәт булды.

Дөйөм алғанда, был эш көнө яҡшы үтте. Студенттар үҙҙәрен бер көн булһа ла уҡытыусы итеп хис итте.Бөтәбеҙ ҙә күтәренке кәйеф, тормошҡа ашасаҡ яҡты хыялдар менән таралыштыҡ.

*Хөсәйенова Н., Садрисламова А.* (52-се *төркөм)*

## Барыбыҙ ҙа кросҡа!

Сентябрҙә Туймазы ҡалаһында өсөнсө тапҡыр Бөтә Рәсәй халҡы кросы булып үтте. Ял көнө булыуға ҡарамаҫтан, иртәнсәк бар халыҡ майҙанға йыйылғайны. Кросты Туймазы йәштәре әҙерләгән күңелле йыр-бейеүҙәр, концерт оҙатып барҙы.

Был йылды стартҡа 10 мең тирәһе кеше йыйылғайны. Улар араһында Октябрьский, Нефтекама, Миәкә, Бәләбәй, Шаран яҡтарынан килгән ҡунаҡтар ҙа булды. Кроста ТПК студенттары ла актив ҡатнашты.

Көн һыуыҡ, әммә күңелдәр күр. Кросс оҙон, әммә уның хаҡында иҫтәлектәр оҙаҡҡараҡ һаҡланыр.Ғөмүмән, студенттарға был көн яҡшы кәйеф бүләк итте.

*Атанғолова Г. (32-се төркөм)*

# Башҡорт теле уҡытыусылары көс һынашты

*Үткән аҙнала, 27-30 ноябрҙә, Өфө ҡалаһында урта белем биреү учреждениеларының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары араһында «Йыл уҡытыусыһы – 2008» бәйгеһе ойошторолдо. Беҙ бөгөн уның финалисы, бөтәбеҙгә лә таныш Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙы менән әңгәмәләшәбеҙ*



***- Гөлнара Яхъя ҡыҙы, һеҙҙең күңелдә бәйге ниндәй тойғолар ҡалдырҙы?***

- Дөрөҫөн әйткәндә, һаман да шул бәйге шауҡымы аҫтында йөрөп ятам. Бәйгелә үҙемде яҡшы яҡтан күрһәтә алдым, тип ҡыуанам. Уның һәр этабын иҫкә төшөрәм, анализлайым. Һығымталар яһайым.

***- Ниндәй ауырлыҡтар булды?***

- Бәйгелә үҙенде ышаныслы тотор өсөн көслө әҙерлек талап ителә. Бер ай эсендә бөтә материалдарҙы әҙерләргә кәрәк ине. Шуныһы ауырыраҡ булды. Ғөмүмән, бөтәһен дә һөйләп бөтөрөрлөк түгел. Бәйгелә ҡатнашыусылар мине аңлайҙарҙыр, ә ҡалғандарҙы һәм һеҙҙе ҡатнашырға саҡырам.

***- Ҡайһы моменттар һеҙгә еңеллек килтерҙе?***

- Тылдың көслө булыуы. Тыл – ул кешенең ғаиләһе. Ғаиләм миңә терәк булды. Тыл – кешенең эшләгән урыны. Коллегаларым, директорыбыҙ һәр яҡлап ярҙам итте. Бөтәһенә лә ҙур рәхмәт!



***- Ярыштың ҡайһы мәлдәре иҫегеҙҙә ҡалды?***

- «Педагогик фәлсәфә», «Импровизациялы дәрес» этаптары. Импровизациялы дәрескә көнө буйы әҙерләндек. Миңә командам (Фатихова Ш.Х, Хөсәйенова Н, Ниғмәтуллин А., Латыпова И.) нык ярҙам итте. Улар афариндар. Шулай уҡ мәғариф министры З.А. Аллаяровтан «Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы» значогын алыу мәле онотолмай. Конкурсанттар менән йәнле аралашыу һаман иҫтә.

***- Бәйге һеҙгә нимә бирҙе?***

-Тәжрибә уртаҡлашыу оҡшаны. Республика кимәлендә тел һәм әҙәбиәткә, уҡытыусыларға мөнәсәбәттең ыңғай икәнен күрҙем.



*Беҙ Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙын ошо еңеүе менән ысын күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ. Был еңеү аҙаҡҡыһы булмаһын, тип ышанабыҙ.*
*Был сараға шулай уҡ Фәтихова Ш.Х. барҙы. Уға ла бер нисә һорау бирҙек.*

Шифа Хәмитовна, һеҙ ҙә Гөлнара Яхъя ҡыҙы менән барҙығыҙ. Шунда алған тәьҫораттарығыҙ менән бүлешһәгеҙсе!

-Бәйгегә бик дәртләнеп барҙыҡ. Беренсе көндән үк мин үҙемдең бөтә Башҡортостандан килгән әхирәттәр, коллегалар менән аралаштым.

Жюри ағзалары менән фәһемле һөйләшеүҙәр булды. Асыҡ дәрестәрҙә үҙемә ултырырға тура килде. Унда күп нәмәләр алдым, тип әйтергә була.



Бәйгелә 9 уҡытыусы ҡатнашты. Барыһы ла көслө әҙерләнгән. Һәр береһе яңы технологиялар ҡулланды.

***-Үҙегеҙ ҡатнашҡан бәйге хәтерегеҙгә төшкәндер, әйеме?!***

-Әлбиттә, ул бәйге бик нык иҫтә ҡалған: ҡырҡ кеше ҡатнашты, ете кеше финалға үтте һәм дүртенсе урын алдым. Гөлнара Яхъя ҡыҙы кеүек нык әҙерләндем. Ул ваҡыттарҙа яңы технологиялар, компьютерҙар юҡ ине, ә хәҙер улар бөтәһе лә бар. Алға үҙгәреш нык һиҙелә.

***-Жюри ағзалары дөрөҫ баһаланымы икән?***

-Был урта профессиональ белем биреү учреждениелары араһында ойошторолған тәүге бәйге. Беренсе ҡоймаҡ төйөрлө була тиҙәр, шуға ҡарамаҫтан, жюри ағзалары дөрөҫ баһа бирҙе, тип уйлайым.

Ошондай сара үткәргәндәре өсөн хөкүмәткә, Мәғариф министрлығына рәхмәттәремде еткергем килә.

*Республикала яҡшы традиция башланды. Был бәйге йыл һайын ойоштоpолаcаҡ. Шуның тәүгеһендә ҡатнашыусы уҡытыусыбыҙ Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙы уңыштары менән ҡыуанабыҙ, ғорурланабыҙ.*

Ибраһимова Диниә, IV курс студенты

# Уҡытыусы һөнәре һоҡландыра ла, уйландыра ла...

Уҡытыусыбыҙ!
Ниндәй ҡайнар
Мөхәббәт сорнай һине!
Ул һөйөү – сыуаҡ һәм
тәрән,
Уйҙар етмәҫлек ине.
Ҙур хөрмәт һиңә, уҡытыусы!
Бергәләп һинең менән
Үтергә беҙгә бит әле
Аяҡ баҫмаған ерҙән.
Бик оҙаҡ бергә барырға,
Бик оҙон беҙҙең юлдар.
Һәм яңы көстәр бирерһең,
Талған саҡтарҙа ҡулдар.
Фәндәр тауына менгәндә,
Ҡуйырһың юлға маяҡ.
Һин яңы көстәр бирерһең,
Талған саҡтарҙа аяҡ.
Үткән быуаттар байлығын
Барларбыҙ бергә-бергә.
Эй, ҡәҙерле уҡытыусыбыҙ,
Йөрәк һүҙебеҙ ошо:
Дан һиңә, мөхәббәт һиңә,
О, беҙҙең йәшлек дуҫы!

Р. Ниғмәти



## Һүҙ – V курстарға

*Беҙ бөтәбеҙ ҙә уҡытыусы һөнәрен һайланыҡ. Күңелебеҙҙә ошо һөнәр эйәләре хаҡында матур тойғолар йәшәй.*

*V курс студенттары бына нимә ти:* «Уҡытыусы – ул белемле, баланы аңлаған, уға ярҙам иткән һәм уны уҡытҡан ҙур йөрәкле кеше. Ул тик яҡшы сифаттарға ғына эйә булырға тейеш», - ти *Рәйлә.* «Күпме йылдар үтһә лә, мин беренсе уҡытыусымды һис ҡасан онотмайым,- ти *Гөлназ.* – Сөнки ул беҙгә уҡытыусы апай ҙа, икенсе әсәй ҙә булды. Беренсе булып уның менән бергә ҙур белем шишмәһендә йөҙөп, хәрефтәрҙе танырға, яҙырға өйрәндем. Уның бер йылмайыуынан класс яҡтырып китә. Матурлығы, мөләйемлеге, аҡылы менән кешене үҙенә йәлеп итә.» *Миләүшә* лә беренсе уҡытыусыһын онотмай: «Уҡытыусым миңә иң яҡындарҙан булды. Сөнки ул миңә беренсе булып яҙырға, уҡырға өйрәтте. Уның һәр бер дәресе ҡыҙыҡлы, күңелле үтте. Кәрәк саҡта маҡтай, ә ҡайһы бер саҡта әрләп ала ла торған ине.» *Альбина* уҡытыусыһына рәхмәтле: «Беренсе уҡытыусым менән ғорурланып, уға оҡшарға тырышып бәләкәйҙән үк уҡытыусы булырға хыялландым. Һәм ошо хыялды донъяға ашырырға миңә уҡытыусы биргән белем ярҙам итте.» Һүҙгә *Ирина* ҡушыла:«Мин педколледжда ихтирамлы, тәжрибәле өлкән кешеләр менән таныштым. Улар һәр ваҡыт кешене асыҡ йөҙө менән ҡаршы ала, гелән ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер». «Әйтерһең, уҡытыусымдың ҡулында аҡбур түгел, ә тылсымлы таяҡ. Үҙенең белеме, башҡорт теленә булған мөхәббәте, ихтирамы менән беҙҙе әленән-әле уҡырға, юғарыға, яңы үрҙәргә өндәй. Яңылышлыҡтарыбыҙ булһа, кисерә, хаталарыбыҙ өҫтөндә ҡат-ҡат эшләп, уларҙы булдырмаҫҡа тырыша,» - *Элмираның* был һүҙҙәре – уҡытыусыбыҙ Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙы тураһында. «Әсә теле дәрестәре минең яратҡан фәнемә әйләнде. Мин, үҙем дә һиҙмәҫтән, тел һәм әҙәбиәт донъяһына сумдым. Туған тел дәрестәрен түҙемһеҙлек менән көтөп ала башланым. Әҙәбиәт дәрестәрендә һәр әҫәрҙе йотлоғоп уҡып, үҙем өсөн яңылыҡ, һабаҡ алдым»,- ти ҡала ҡыҙы *Зилә.*

*Юғары курс ҡыҙҙары үҙҙәре лә киләсәктә яҡшы уҡытыусы булырҙар, тип ышанабыҙ.*

## Студенттар әсәһе...

- Уҡымышлы кешенең һүҙе тәмле.
- Телең менән уҙма, белемең менән уҙ.
- Кешенең белемен һүҙенән аңларһың.
- Аҡыллының теле күңелендә, Аҡылһыҙҙың күңеле телендә.
- Аҡылдың үлсәүе һүҙҙә.
- "Беләм" – мең һүҙ, "белмәйем" – бер һүҙ.
- Белгәнгә бер һүҙ етә.

# Фәнни конференция үтте

22 ноябрь көнөндә Туймазы педагогия колледжында уkыусылар һәм студенттар араһында фәнни тикшеренеү һәм ижади эштәр “Йәшлек.Фән.Мәҙәниәт” тип аталған бәйгеһе үткәрелде. Бәйгелә бары 119 кеше kатнашты. Улар араһында Өфөнән, Сибайҙан, Стәрлетамаkтан, Бәләбәйҙән, Кушнаренканан, Белорецкийҙан, Октябрьскийҙан килеүселәр бар ине. Төрлө техникум, колледж, БДПУ студенттары үҙҙәренең эштәрен яkланылар. Туймазы kалаһының 2-се, 7-се һанлы мәктәптәренән күп бәйгеселәр булды. Фәнни тикшеренеү һәм ижади эштәр күп өлкәләге проблемаларҙы үҙ эсенә алды. Химия һәм биология, информацион технологиялар, математика, социология һәм политология, педагогика һәм психология, хоkуk, экономика, тарих, лингвистика һ.б. өлкәләргә арналған эштәр тапшырылды.



Бәйгене фәнни эш буйынса директор урынбаҫары Кузнецова Татьяна Владимир kыҙы һәм бүлек мөдире Мөсифуллин Салауат Ришат улы ойошторҙо. Бәйгеселәр алдында Халыk-ара өҫтәлмә белем биреү академияһы академигы, “Киләсәк интелекты” журналы, “Обнинск полисы” альманахының баш мөхәррире Романов А.С. сығыш яһаны. Ул Мәскәүҙән килде. Конференция уkыусылар, студенттар өсөн kыҙыkлы һәм әһәмиәтле булды. Һайланған темалар бөгөнгө заманда белем, мәҙәниәт, фән, техника үҫешен күрһәтте. Был эштең маkсаты — йәштәрҙе фәнни тикшеренеүгә саkырыу, ижади эштәргә kыҙыkһыныу уятыу, уларҙың белем кимәлен үҫтереү.

Конференция юғары кимәлдә үтте. Ойоштороусылар бының менән генә сикләнергә уйламай. Артабанғы йылдарҙа ла бәйге ойоштороласаk. Жюри ағзалары бәйгене 2 көнгә һуҙып яһарға тигән теләк әйтте.

Беҙҙең колледждан да kатнашыусылар һәм урын алыусылар байтаk. Беренсе урынды төрлө номинацияларҙа алыусылар араһында Маматов Р. (33-сө төркөм), Нәбиуллина Р. (33-сө төркөм), Тайчина Н., Нәсибуллина А. (33-сө төркөм), Алчинова А. (33-сө төркөм) яуланы. Икенсе урынды Фәррәхова Г., өсөнсө урынды Мөхәммәҙиева Ә., Аҫылгәрәева Е., Зәһиҙуллина А. алдылар. Уларҙы әҙерләүселәр — беҙҙең колледж уkытыусылары.



Минеңсә, үткәрелгән эш һис шикһеҙ яуаплы, kатмарлы һәм мөһим булды. Ошондай эштәр күберәк ойошторолһон ине. Мин үҙебеҙҙең бүлек kыҙҙарына ошо бәйгелә kатнашырға саkырам, сөнки ысын уkытыусы булам тигән кеше фәнни тикшеренеү эше менән шөғөлләнергә тейеш.

*Әхмәзиева З., IV курс студенты.*



# Кыҙҙар моңо

## *Иртән*

Иртән торҙом,
Тышка сыктым.
Көн һалкын, буран ине.
Бөтә донъя ап-ак карға
Күмелгән, тулған ине.
Әсәй сыкһа, кыуаныр тип.
Карҙы ла көрәп куйҙым.
Епшек карҙан түңәрәкләп
Кар бабай яһап куйҙым.

Мөхәмәтдинова А. (12-се төркөм)



## Көләмәстәр.

Юғары укыу йортонда имтихан бара. Вәли беренсе булып инә. Билет ала, якшы итеп һөйләй. Бөтә һорауҙарға ла яуап бирә. Профессор:

-Һуңғы һорауға яуап бир инде: ни өсөн беҙҙең укыу йортон һайларға булдың?

-Ә беҙ был һорауға репетиция яһаманык...

***

-Һаумыһығыҙ, был Айҙар Афзаловтың әсәһе шылтырата. Минең улым бөгөн мәктәпкә бармаясак.

-Ни өсөн?

-Сөнки уға бөгөн 33 йәш тулды.

***Гәзитте ойоштороусы*** - – башкорт теле укытыусыһы Кәримова Г.Я.
***Баш мөхәррир*** – Абдуллина Динара
***Мөхәрририәт:***
Садрисламова Альбина
Әхмәҙиева Зилара,
Ибраһимова Диниә,
Садрисламова Альбина,
Атанғолова Гөлназ,
Лотфуллина Ильгина.
**Беҙҙең адрес:** Туймазы калаһы Комаров урамы, 3б.
**Беҙҙең сайт:** http://www.tpkrb.ru/

## *ДЕКАБРЬ АЙЫНА ЙОНДОҘНАМӘ*

**Куҙы (21.03 – 20.04)** Декабрь яңы тәьҫораттарға, кыҙыклы аралашыуҙарға бай булмаксы. Эшлекле һәм дуҫтарса бәйләнештәр киңәйер, фәлсәфәүи ғилеигә кыҙыкһыныу уяныр. Йондоҙҙар һөнәри өлкәлә уңыштар вәғәҙәләй. Быға тиклем тормошка ашырырға йөрьәт итмәгән уй-ниәттәрегеҙгә лә, ниһайәт, уңайлы мәл етте. Тәүәккәл булығыҙ, мөмкинлектәрҙе кулығыҙҙан ыскындырмағыҙ.

**Буға (21.04 – 21.05)** Был айҙа үҙегеҙҙе көрсөккә килеп терәлгәндәй хис итерһегеҙ. Аңлайышһыҙ, катмарлы хәл-вакиғалар әленән-әле мәшәкәттәр өҫтәп кенә торор. Ошоғаса юғалтып куйыуҙан куркккан күңелегеҙгә якын нәмәнән дә колак кағыуығыҙ бар. Быңдай осрактарҙы, ғәҙәттә, яҙмыштың рәхимһеҙлеге кеүек тә кабул итәләр. Әммә төшөнкөлөккә бирелергә ашыкмағыҙ, сөнки һеҙгә яңы мөмкинлектәр, көс-кеүәтт бирелер. Кыйыу рәүештә дуҫтарығыҙ, һөнәрҙәштәрегеҙ иңенә таяна алаһығыҙ. Ә тормошоғоҙҙан "тартып" алынған вак-төйәктәр өсөн борсолорға кәрәкмәй, буш урындың эйәһе мотлак табылыр.

**Игеҙәктәр (22.05 – 21.06)** Йондоҙҙар һеҙгә эшлекле партнерҙар һәм икенсе яртығыҙ менән мөнәсәбәттә әһәмиәтле генә үҙгәрештәр юрай. Романтик тойғолар уяткан яңы танышлыктар никахка инеү кеүек мөһим карарға этәреүе ихтимал. Һәр аҙымды айык акыл, сабырлык менән уйлап эш итеү хәйерле.

**Кыҫала (22.06 – 23.07)** Кыштың тәүге айы кыҫала йондоҙлоғо вәкилдәрен башкөллөһө менән эшкә күмер. Һеҙгә йөкмәтелгән хеҙмәт талабын яуаплырак башкарырға кәрәк булыр. Элекке бурыстарҙы кайтарыу мәсьәләһе лә калкыр. Мәшәкәт тыуҙырған хәл-вакиғаларға алдан әҙер булыу, яраклашыу һеҙҙең сәләмәтлеккә, кәйефкә артык йоғонто яһамаҫ.

**Арыҫлан (24.07 – 23.08)** Был айҙа ташып торған дәрт-дарманығыҙ һеҙгә уй-теләктәрегеҙҙе тормошка ашырырға, кинәнеп күңел асырға, яңы танышлыктар булдырырға, дуҫ-иштәр менән рәхәтләнеп ял итергә мөмкинлек бирер. Был арауыктың төмен, айырыуса, тормоштан йәм табып, әйләнә-тирәләгеләргә шатлык өләшеп йәшәүсе арыҫландар тойор.

**Кыҙ (24.08 – 23.09)** Декабрҙең хәл-вакиғалары, башлыса, туғанлык мөнәсәбәттәрен нығытыуға бәйле булмаксы. Һеҙҙән якын кешеләрегеҙгә игтибарлы булыу, тормоштарындағы иҫтәлекле мәлдәрҙең эсендә кайнау, кәңәш менән ярҙам итеү талап ителер. Был айҙа ынтылыш-башланғыстарығыҙға ышаныслы нигеҙ һалырһығыҙ. Тоторокло һәм ныклы ғаилә бәйләнештәре аркылы үҙегеҙҙе эмоциональ яктан калканлы, таянысль тойорһоғоҙ.

**Үлсәү (24.09 – 23.10)** Яңы бәйләнештәр булдырыу, элекке килешеүҙәрҙе нығытыу, уларҙы тормошка ашырыу йәһәтенән декабрь айы бик әүҙем башланыр. Һөнәри мәсьәләләрҙе сискәндә лә, үҙегеҙҙе һыуҙағы балыктай хис итерһегеҙ. Кеше менән йәһәт уртак тел таба, еңел аралаша белеү һәләтегеҙ кыҙыклы һәм файҙалы танышлыктар вәғәҙә итә.

**Саян (24.10 – 22.11)** Бизнес пландар, эшлекле көн тәртибе декабрҙә айырыуса ҙур иғтибар талап итер. Тап ошо айҙа финанс хәлегеҙҙе лә һиҙелерлек яйлай алырһығыҙ. Килем өсөн яңы сығанактар эҙләү, якшы вакыттар өсөн калдырған элекке проекттар өҫтөндә эшләү ыңғай һөҙөмтә бирер. Бүтән йондоҙлок вәкилдәренән айырмалы рәүештә, күк есемдәре был айҙа саяндарға сикһеҙ рәхимле. Һеҙҙең эшмәкәрлек бик юғары баһаланыр, ҙур күләмдә аксалата премия биреүҙәре, эш хакын күтәреүҙәре ихтимал.

**Уксы (21.04 – 21.05)** Уксылар өсөн декабрь баш әйләнерлек грандиоз пландар һәм уларҙы бойомға ашырыу өсөн ташып торған дәрт-дарман айы. Шәхси абруйығыҙ, максатка ирешеүсән һәм тәүәкәл булыуығыҙ аркылы быға тиклем икеләнергә мәжбүр иткән һорауҙары ла еңел генә йәйләрһығыҙ.

**Ылак (22.12 – 20.01)** Һеҙгә ял һәм сәләмәтлегегеҙҙе кайғыртыу мотлак. Ауыр сактарҙа дуҫ-иштәрегеҙгә, якындарығыҙға мөрәжәғәт итеүҙән тартынмағыҙ, улар һеҙгә ҙур таяныс-терәк күрһәтер. Етәкселәр йәки оло йәштәге кешеләр менән йөшерен дошманлыктан абай булығыҙ, киҫкен мөнәсәбәттәрҙән алыҫ тороуығыҙ хәйерле. Күп кенә ылактар был айҙа рухи камиллыкка ынтылыр, күңел донъяһына байкау яһар, хис-тойғоларын ипкә килтерер, тормошка икенсе күҙлектән бағыр.

**Һыуғояр (21.01 – 19.02)** Декабрҙә яңы дуҫлыкка нигеҙ һалһағыҙ, тормошоғоҙға яңылык индерерҙәй һәләтле, дәртле кешеләр менән мөнәсәбәттәр корһағыҙ, шик юк - тик отасакһығыҙ ғына. Үҙегеҙҙә быға тиклем һиҙелмәгән көс-кеүәт барлығын тойорһоғоҙ еңел аралашырһығыҙ, мөһим эштәрегеҙҙе бер ниндәй кәртәләргә хәл итә алырһығыҙ

**Балык (20.02 – 20.03)** Был йондоҙлок вәкилдәре өсөн декабрь бик яуаплы ай. Күпселек уй-пландарығыҙҙы тормошка ашырыу, яңы өмөтлө йүнәлештәрҙә эшләү уңыш кына килтерә. Йәмғиәттә, һөнәри өлкәлә абруйығыҙ бермә-бер артыр. Ата-әсәйегеҙҙең таянысы һәм ғаилә ғөрөф-ғәҙәттәренең нигеҙе бөйөк пландарығыҙҙы бойомға ашырырға, максатка ирешергә, етәксе урындарға дәғүә итергә булышлык итер.